190 ЛЕТ МИФТАХЕТДИН АКМУЛЛА

БАШКИРСКИЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ



**Ҡасимова Э. Ғ.**

# БАЛАЛАРҘЫҢ ТЕЛМӘР ПСИХИКАҺЫНЫҢ ҮҪЕШ КИМӘЛЕН ТИКШЕРЕҮ ӨСӨН МЕТОДИКА

Уҡыу-методик ҡулланма

**Өфө - 2022**

МИНПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИИ
ФЕДЕРАЛЬНОЕ ГОСУДАРСТВЕННОЕ БЮДЖЕТНОЕ
ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ
УНИВЕРСИТЕТ ИМ. М. АКМУЛЛЫ»

**Ҡасимова Э. Ғ.**

# Балаларҙың телмәр психикаһының үҫеш кимәлен тикшереү өсөн методика

Уҡыу-методик ҡулланма

**Өфө - 2022**

УДК 81'233:159.92-0513.2

ББК 81.2 Баш – 9 + 88.3

**Рецензенты:**

Чиркина Г.В., д-р пед. наук, профессор ГНУ ИКП РАО (г. Москва);

Юсупова Г. Х., к. психол. наук, доцент кафедры специальной педагогики и психологии ФГБОУ ВО «БГПУ им. М. Акмуллы»;

Гайнуллина И. Г., учитель-логопед высшей категории МБДОУ «Башкирский детский сад № 40» ГО г. Уфа РБ

Ҡасимова Э. Ғ. Балаларҙың телмәр психикаһының үҫеш кимәлен тикшереү өсөн методика: Уҡыу-методик ҡулланма / Э. Ғ. Ҡасимова, яңыртылған 2-се баҫма – Өфө: Издательство БГПУ , 2022 – 58с.

ISBN 978-5-907176-03-4

Тәҡдим ителгән методика балаларҙың психикаһы боҙолоуының сифатын, күләмен баһалау һәм дефекттар структураһын анализлау, юғары һәм түбән класс уҡыусыларының психик үҫешен асыҡлау өсөн тәғәйенләнгән.

Был ҡулланма логопедтар, дефектологтар, психологтар, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр өсөн төҙөлгән.

*Исследование выполнено при финансовой поддержке РГНФ в рамках научно-исследовательского проекта РГНФ «Коррекция речи у детей-башкир», проект № 10-06-84-616 а/У.*

© Касимова Э. Г., 2010

© Касимова Э. Г., 2022

**Йөкмәткеһе**

Инеш……………………………………………………………..............4

1. Тест методикаһын һүрәтләү…………………………..........……..6

2. Методиканың структураһы…………………………………..…........7

3. 6-8 йәшлек балаларҙың телмәр психикаһының үҫешен тикшереү өсөн күнегеүҙәр һәм алымдар методикаһы...........................12

4. Тикшереү һөҙөмтәләрен эшкәртеү һәм анализлау……...........45

Ҡулланылған әҙәбиәт………………………………………….........56

## Инеш

Диагностик ҡулланманың төп маҡсаты булып баланың уҡыуын дауам итер өсөн, уҡыу йортоноң төрөн билдәләү һәм шул уҡ ваҡытта баланың үҫеш кимәленең боҙолоуын да билдәләү тора.

Дифференциаль диагнозды билдәләү ваҡытында интеллектуаль эшмәкәрлегендәге кеүек үк беренсел һәм икенсел боҙолоуҙарҙы, телмәр үҫешендә күҙ уңында тотоп, психиканың дөйөм боҙолоуын айырып ҡарау һәм билдәләү бик мөһим.

Икенсел (һәм өсөнсөл) боҙолоуҙар йыш ҡына телмәр үҫешенең етешһеҙлектәре менән бәйле икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Тоткарланған интеллектуаль үҫештә күренгән икенсел боҙолоуҙар, ишетеү һәләтендә һәм телмәр үҫешендә лә сағылырға мөмкин.

Беренсе осраҡта телмәр үҫешенең боҙолоуы, икенсе осраҡта – аң кимәленең ҙур булмаған кәмселектәре, өсөнсө осраҡта психик үҫешенең тоткарланыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән интеллектуаль эшмәкәрлектәге дифференциаль диагностиканың етешһеҙлектәре ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра һәм шуның менән бергә ышаныслы психологик диагностик методикаларға мохтаж.

Стандарт методик тикшеренеүҙә балаларҙың баллы күрһәткес менән баһаланған психик телмәр үҫешен (6-8 йәш) беҙ бөтә донъя практикаһында танылған балалар тестарына таянабыҙ (RB. Ammonestal, 1950, L. Dann, 1958, D.Wechen, 1974), Л. С. Выготскийҙың хеҙмәттәре, А. Р. Лурия, 1981), А. Анастази (1982), С. Д. Замбрамной (1981), Е. А. Стребелевой (1994), Л. И. Переслени (1996) һ.б.

Эш тәжрибәһе шуны күрһәтә, бирелгән тест методикаһы:

- дифференциаль диагностика;
- психик телмәр дефекты структураларын дөрөҫләү һәм телмәрҙең төрлө яҡтан боҙолоу кимәлен баһалау дәрәжәһе;
- индивидуаль коррекцион төҙөлөш системаһы;

- телмәр психикаһы үҫеше боҙолоуын дөйөм структура нигеҙендә төркөмсәләргә бүлеү, телмәр психикаһының үҫешен күҙәтеү һәм эффектлы коррекцион тәьҫир итеүҙе баһалау өсөн уңайлы.

Был ҡулланмала балаларҙа күренгән телмәр кәмселектәре һәм һәр эштең баһаһы асыҡ сағылған.

Балаларҙың телмәр үҫешендәге төрлө боҙолоуҙарын (ОНР, ЗПР, аң кимәленең системалы телмәр кәмселектәре менән тотҡарланыуын) билдәләүсе шәхси һыҙаттарҙың анализы төҙөлөш кәмселектәрен асыҡлаусы методиканың мөмкинселектәрен асыҡ күрһәтә.

Һөҙөмтәләрҙе тикшереү ваҡытында алынған статистик эшкәртеү юғарыла әйтелгән балалар төркөмдәренә хас булған уртаса күрһәткестәр сығарырға ярҙам итә.

Уларҙы сағыштырыу килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе аңлатып биреүгә һәм кәмселектәрҙең дәрәжәһен билдәләүгә ҙур мөмкинлек бирә.

Методика мәктәпкә тиклемге ҙур йәштәге (6-7 йәш) һәм мәктәп йәшендәге бәләкәй (7-8 йәш) балаларҙың психик-телмәр үҫешендәге үҙенсәлектәрен билдәләү өсөн ҡаралған.

## 1. Тел методикаһын һүрәтләү

Методика үҙ эсенә 19 серияны ала, һәр береһе үҫә барыусы ауырлыҡтарҙы дөйөмләштереп тикшереп ҡарай. Телмәрҙең төрлө яҡтарының баһаһы һәм психик функцияһы дөйөм балға бер төрлөрәк өлөш индергән ҡушылған балдар һәр береһе серияны башҡарыу өсөн тигеҙ булырға тейеш.

Бөтә тикшереүҙәр айырым пробаларҙы үҙ эсенә ала.

Һәр пробала айырым серияның бөтә күнегеүҙәренә лә дөйөм баһа бирелә.

Ҡайһы бер серияларҙа пробаның критерийҙары  уйлап табылған. Бөтә серияларҙы баһалағанда дөйөм ҡағиҙә булып XVIII сериянан башҡа, дүрт градация ярҙамында эшләнгән уңыштың иҫәп дәрәжәһен күрһәтә, был дифференциаль һөҙөмтәне алыуға ярҙам итә.

I-ҙән XIV серия өсөн; XV; XVI; XVIII; XIX – был 1; 0,5; 0,25; 0 балл, өн әйтелеше өсөн – 3; 1,5; 1,0 балл һәм XIV-XVII – 5 серия өсөн; 2,5; 1; 0 балл. Төрлө эштәрҙә был бер нәмәнән икенсеһенә күскәндәге эҙмә-эҙлелек (градация) аныҡлыҡты сағылдыралар һәм дөрөҫ башҡарылыуы, хатаның ебәрелеүе һәм ярҙамды ҡулланыуы күренә.

## 2. Аҡыл яғынан артта ҡалған балалар теле методикаһының структур төҙөлөшө

**I серия. «Фекерләү ҡеүәһен тикшереү»** – телмәр һәм фекерләүҙең бер-береһе менән тығыҙ мөнәсәбәте һөҙөмтәһендә балаларҙың телмәре боҙолоуын анализлаусы иң мөһим мәсьәлә булып тора. Баланың теле боҙолоуына нимә сәбәпсе була һуң? – бала теленең үҫешен тотҡарлаусы етешһеҙлектәрме, әллә аҡыл яғынан артта ҡалыуымы? Был проблемаларҙы тикшереү өсөн биш төрлө практик эш алынды.

**II серия. «Иғтибарлылыҡты тикшереү»** – баланың күреү, ишетеү, һөйләү торошон һәм иғтибарлылыҡ һәләтен билдәләүҙе үҙ эсенә алған биш практик эштән тора. Баланың иғтибарлылыҡ үҫешенә уның аҡыл яғынан артта ҡалыуы ла һәм башҡа кәмселектәр ҙә ҙур йоғонто яһай.

**III серия. «Хәтерләү ҡеүәһен тикшереү».** Шулай уҡ биш практик эштән тора. Был практик эштәр туранан-тура хәтерләү һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән. Был осраҡта күргәҙмә материалдар ғына түгел, хәрефтәр һәм һандар менән бирелгән һүҙҙәр һәм символдар ҙа ҡулланыла. Балаларҙың насар иҫтә ҡалдырыуына ҡарап, аҡыл яғынан артта ҡалыусы балаларҙы айыралар.

**IV серия. «Һөйләү кимәленең үҫешкәнлеген тикшереү»** – ишетеү, иғтибарлылыҡтың ниндәй дәрәжәлә булыуын, һиҙемлелектең үҫешен, ишеткәнде күҙ алдына килтереү һәләтен үҙ эсенә алған биш практик эштән тора. Ниндәйҙер кимәлдә был процестарҙың боҙолоуы ишетеү һәм иғтибарлылыҡҡа насар йоғонто яһай.

**V серия. «Күреү һәләтен тикшереү».** Был өлөш тә биш практик эштән тора. Улар иғтибарҙы йәлеп итеп, һиҙемләү, тойомлау, күҙ алдына килтереүгә йүнәлтелгән. Ошо һығымталарҙы күҙ уңында тотоп, уңышлы башҡарылған V-XIII серияларҙың һөҙөмтәләрен сағыштырып ҡарау-күреү функцияларында сағылған кәмселектәрҙе айырып ҡарарға мөмкинселек бирә.

**VI серия. «Ҡулдарҙың эшләү һәләтен тикшереү».** Ҡулдарҙың хәрәкәтләнеүен, йүнәлешен, мускулдар тонусының үҫешен билдәләүсе ун төрлө эш ҡаралған. Мускулдар тонусының боҙолоуы урта нервы системаһының органик һәм функциональ йәрәхәтләнеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән.

**VII серия. «Артикуляцион моториканы тикшереү»** – уны егерме эш төрө менән билдәләп була. Уларҙың ун төрө тикшереүсенең хәрәкәттәр һәм хәрәкәттәр сылбыры аша артикуляция моторикаһының торошон билдәләүгә йүнәлтелгән, ә ҡалған ун төрө – ауыҙ хәрәкәттәрен тикшерә.

**VIII серия. «Өндәр әйтелешен тикшереү»** – айырым һайлап алынған һүҙҙәр ярҙамында өндәр әйтелешен тикшереү. Бөтә тикшереү нигеҙендә дөйөм баһа бирелә, шул уҡ ваҡытта төрлө телмәр ситуацияһында төрлө өн әйтелешен асыҡларға мөмкинселек тыуа.

**IX серия. «Фонематик һиҙемләүҙе тикшереү».** Оҡшаш өндәрҙән торған ижектәр сылбырын күрһәтеүсе егерме эш ҡулланыла. Логопедик практикала был алым традицион рәүештә фонематик һиҙемләүҙе тикшереү өсөн ҡулланыла. Ләкин был эштәрҙе башҡарғанда ҡайһы бер ҡаршылыҡтар ҙа сығыуы бар. Мәҫәлән: баланың һүлпәнлеге иң тәүҙә уның ниндәйҙер бер ижектә генә туҡталып ҡалыуына бәйләнә. Шуға күрә был эш комплекслы характер алып тора.

**X серия. «Өн-ижектәрҙең структур төҙөлөшөн тикшереү».** Һүҙҙең өн-ижек структураһында булған боҙолоуҙарҙы тикшереү өсөн ун биш һүҙҙең ижек структураһын аҡрынлап ҡатмарлаштырыу бара. 6-7, 7-8 йәшлек балалар өсөн материал айырым һайлап алына.

**XI серия. «Һүҙлекте тикшереү» –** үҙ эсенә һүҙ формаһын асыҡлаусы үҙ эш төрөн алып тора: тематик төркөмдәр буйынса һүҙлек төҙөү, сифаттарҙың синонимдарын, антонимдарын табыу, заман категорияһында һүҙҙәрҙе үҙгәртеү кеүек эштәр ҡарала. Һүҙ байлығының ярлы булыуы, баланың психик яҡтан етешһеҙлегенән тыш, уның ижтимағи һәм педагогик

яҡтан да үҫешмәгәнлеген асыҡларға мөмкинселек тыуҙыра, асыҡ дәлил булып тора.

**XII серия. «Телмәрҙе анализлау күнекмәләре»** – баланың «өн», «ижек», «һүҙ», «һөйләм» кеүек төшөнсәләрҙе аңлауы һәм уларҙы һөйләү телмәрендә айырым ҡуллана белеү күнекмәләрен индереүсе ун эш төрөн үҙ эсенә һыйҙыра.

**XIII серия. «Телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн тикшереү».** Үҙ эсенә ун эш төрөн ала. Һәр эш баланың һүҙҙәрҙе килеш, һандар менән үҙгәреүен, ябай һәм ҡатмарлы һөйләмдәрҙе айырыуын, сифаттарҙы белеүен һ.б. грамматик үҙгәреш төрҙәрен аңлауын, дөрөҫ ҡулланыуын тикшерә. Телмәр төҙөлөшөнөң боҙолоуы психологик үҫеше артта ҡалған (ЗПР), (ОНР) балаларға хас.

**XIV серия. «Телмәр темпы һәм талғынлығы»** – артикуляция, тауыш һәм тын алыу органдарын контролдә тота, периферия аппаратының торошон билдәләй. Үҙәк нервы системаһының зарарланыуы телмәр талғынлығының боҙолоуына килтерә. Ул тотлоҡҡан, дизартрия ауырыуҙары менән ауырыған балаларға хас.

**XV серия. «Телмәрҙең интонацион асыҡлығын тикшереү».** Төрлө интонацияларҙы аңлау; бирелгән интонацияны ҡабаттан сағылдырып, үҙ аллы әйтә белеү кеүегерәк ун эш төрөнән ғибәрәт. Ошо эштәрҙе үтәй алмау, баланың үҙәк нервы системаһының боҙолғанлығын, йә телмәр патологияһы барлығын күрһәтә.

**XVI серия. «Бирелгән әҫәрҙе аңлау дәрәжәһен тикшереү»** – өндәш телмәрҙе тикшереүгә йүнәлтелгән. Тикшереүҙәр өсөн А. Р. Лурия методикаһы алынған. Бөтәһе 10 эш бирелә.

**XVII серия. «Бәйләнешле телмәрҙе тикшереү».** Быны өсөн балаларға ә эш тәкдим ителә: сюжетлы ваҡиғаларҙан сығып, хикәйә төҙөү һәм уны һөйләп биреү. Был иң ҡатмарлы серияларҙың береһе булып тора. Шуға күрә лә был эштең эшләнеү ваҡыты 15 йыл тирәһенә һуҙыла һәм өлөштәрҙең ҡушылмаһы 30-ға барып баҫа. Ә инде хикәйәне һөйләп биреү

өсөн иҫтә ҡалдырыу талап ителә. Бәйләнешле телмәр булһын өсөн фекерләү эшмәкәрлегенең үҫешкән булыуы мөһим. Р. И. Лалаева тәҡдим иткән күнегеүҙәр телмәр бәйләнешлеген тикшереүгә ярҙам итә.

**XVIII серия. «Яҙыуҙы тикшереү»** – үҙ эсенә ун күнегеүҙе ала. Улар яҙыуҙа булған хаталарҙы табыу, үҙ аллы яҙыу ваҡытында текстан нисек күсереү менән бәйле. Был серияның һөҙөмтәләрен икенселәре менән сағыштырыу телдән һөйләү һәм яҙыу телмәрен тикшереп ҡарарға бик ныҡ ярҙам итә.

**XIX серия. «Уҡыуҙы тикшереү».** Был методика баланың телмәре үҫешкәнлеген тикшереүҙе үҙ эсенә ала.

Бөтә методикаларҙың да башҡарылыуын күрһәткән иң юғары балдарҙың суммаһы булып, 6-7 йәштә – 195 б.; 7-8 йәштә – 300 б. тәшкил итә.

Алынған һөҙөмтәләрҙе тикшереп ҡарағанда абсолют мәғәнә процент рәүешендә сағыла. Әгәр ҙә 195 (300) балдарҙы – 100% итеп алһаҡ, ул саҡта методиканың башҡарылыуын билдәләүсе уңышлылыҡ процентын һәр кисереү менән һанап сығарырға мөмкин, уның өсөн ҡушылған балды 100-гә ҡабатларға кәрәк һәм килеп сыҡҡан яуапты 195 (300)-гә бүлергә кәрәк. Методиканың эшләнеш кимәле тәҡдим ителгән һәм 4 кимәл менән сағыштырыла:

| | 6-7 йәш | 7-8 йәш |
|---|---|---|
| V – 100% - 95% | 195-185,25 б. | 300-285 б. |
| IV – 94,9% - 80% | 185-156 б. | 284,7-204 б. |
| III – 79,9% - 65% | 155,8-126,8 б. | 239,7-195 б. |
| II – 64,9% - 50% | 126,5-97,5 б. | 194,7-150 б. |
| I – 49,9% унан түбән | 97,3 б. унан түбән | 194,7 б. унан түбән |

Айырым психологик телмәр профилен килтереп сығарыу өсөн һәр бер серияның ыңғай үтәлешен процентарҙа сығарырға кәрәк. Килеп сыҡҡан һөҙөмтәләр ярҙамында телмәр профиленең таблицаһын һыҙырға мөмкин. Бындай таблица коррекцион программа төҙөргә ярҙам итәсәк.

I  серия. «Фекерләү ҡеүәһен тикшереү».

II серия. «Иғтибарлылыҡты тикшереү».

III серия. «Хәтерләү ҡеүәһен тикшереү».

IV серия. «Һөйләү кимәленең үҫешкәнлеген тикшереү».

V серия. «Күреү һәләтен тикшереү».

VI серия. «Ҡулдарҙың эшләү һәләтен тикшереү».

VII серия. «Артикуляцион моториканы тикшереү».

VIII серия. «Өндәр әйтелешен тикшереү».

IX серия. «Фонематик һиҙемләүҙе тикшереү».

X серия. «Өн-ижектәрҙең структур төҙөлөшөн тикшереү».

XI серия.  «Һүҙлекте тикшереү».

XII серия. «Телмәрҙе анализлау күнекмәләре».

XIII серия. «Телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн тикшереү».

XIV серия. «Телмәр темпы һәм талғынлығы».

XV серия. «Телмәрҙең интонацион асыҡлығын тикшереү».

XVI серия. «Бирелгән әҫәрҙе аңлау дәрәжәһен тикшереү».

XVII серия. «Бәйләнешле телмәрҙе тикшереү».

XVIII серия. «Яҙыуҙы тикшереү».

XIX серия. «Уҡыуҙы тикшереү».

## 3. 6-8 йәшлек балаларҙың телмәр үҫеше психикаһын тикшереүсе күнегеүҙәр һәм эш төрҙәре методикаһы

### I серия. «Фекерләү ҡеүәһен тикшереү»

Был серияла дифференциация осоронда аналитик һәм синтетик үҫеш кимәлен тикшереү, шулай уҡ сюжетлы картиналарҙың йөкмәткеһен һәм мәғәнәһен аңлау, уларҙа һүрәтләнгән ваҡиғаларға эмоциональ ҡараш аша иң әһәмиәтле билдәләрҙе асыҡлау тора. Бирелгән эштәр баланың күҙ алдына килтереп фекерләүе менән бәйле.

**1-се эш. «Киҫелгән һүрәттәр»**

**Бирелә:** ә предметтан торған һүрәттәр беренсеһе өлгө буларак, ә икенсеһе 5 өлөшкә бүленгән. Бала ошо өлөштәрҙән бер бөтөн һүрәтте йыйырға тейеш.

**2-се эш. «Дүртенсеһе артыҡ»**

**Бирелә:** 6-7 йәшлек балаларға төрлө йүнәлештәге һүҙҙәр бирелә

йүкә – ҡайын – имән – сирен

Был һүҙҙәрҙең ҡайһыһы артыҡ: (ағас – ҡыуаҡ); ни өсөн? Ә 7-8 йәшлек балаларға иһә был күнегеүҙән айырмалыраҡ эш бирелә.

йүкә – ҡайын – имән – шыршы

**Күрһәтмә:** Артығын тап, ни өсөн икәнлеген аңлат.

**3-сө эш.** «Икенсе һыҙат буйынса предметтарҙы классификациялау (төҫө һәм формаһы)»

**Бирелә:** табло (горизонталь буйынса – геометрик фигуралар ,  , , , вертикаль буйынса – төҫтәр ҡыҙыл, һары, күк, йәшел) һәм үҙ һүрәт. Предмет айырым бер формала һәм төҫтә – ҡояш.

Тикшереүсе бер нәмә лә аңлатмайынса ә һүрәт күрһәтә һәм уны дауам итергә ҡуша. Әгәр бала был эште үтәй алмаһа, тикшереүсе иғтибар менән предметҡа ҡарарға, форма һәм төҫөн айырырға өйрәтә.

**4-се эш. «Сюжетлы һүрәттәрҙе аңлай белеү»**

**Бирелә:** Йөкмәткеһе буйынса яҡын булған ә һүрәт.

«Ҡышҡы уйындар» (ишек алдында саңғы, сана менән тауҙан шыуыу), «Һаумы, Яңы йы!» (байрам майҙанында тауҙан шыуыу).

**Күрһәтмә**: «Һаумы, Яңы йыл!», «Ҡышҡы уйындар» исемле һүрәттәрҙе айырып күрһәт, ни өсөн икәнлеген аңлат.

**5-се эш. «Сюжетлы һүрәттәрҙең йөкмәткеһен аңлау»**

**Бирелә:** Дүрт һүрәт.

**Күрһәтмә**: Һүрәттәрҙе бер-бер артлы бәйләнешле итеп теҙеп һал. Был буласаҡ сюжетлы һүрәткә исем уйлап тап.

Был эш балл ҡуйып билдәләнә.

Баһа: 1 балл – үҙ аллы эшләү;

0,5 балл – һорауҙар ярҙамында эште башҡарыу;

0,25 балл – аңлатҡандан һуң эшләү;

0 – эште эшләй алмау.

Был эштәргә иң ҙур балл – 5.

## II серия. «Иғтибарлылыкты тикшереү»

Бирелгән күнегеүҙәр баланың иғтибарлылығын, тиҙлеген, күләмен, һайлап ала белеү аныҡлығын һәм һәммәһенең эшләнеше ваҡытында тикшереүҙәр алып барыла.

**1-се эш. «Танграм уйыны»**

**Бирелә:** Өҫтәлгә (  ) геометрик фигураларҙан торған предметтарҙы һалалар.

**Күрһәтмә:** Өсмөйөштәрҙе тап һәм уларҙы һанап бир.

**2-се эш. «Ағаста нисә ҡош?»**

**Бирелә:** Ағаста аҡлы-ҡаралы төҫтә 10 ҡош ултыра.

**Күрһәтмә:** Ҡоштарҙы тап, һана.

**3-сө эш.**

**Бирелә:** Өҫтәлдә 1 ҡап төҫлө ҡәләмдәр, юйғыс, ручка, китап ята; шулай уҡ өҫтәл эргәһендә сүп кәрзине тора, туп ята.

**Күрһәтмә:** Күҙҙәреңде йом һәм әйт «Өҫтәлдә нимәләр ята, уның эргәһендә нимәләр бар?»

**4-се эш.**

**Бирелә:** Векслер тестынан таблица.

**Күрһәтмә:** Һәр юлдағы йондоҙҙарҙы һыҙ.

**5-се эш. «Иғтибарлы бул»**

Телмәр структураһы менән эшләү.

**Күрһәтмә:** «Мин һиңә нимә әйтәм, шуны эшлә».

1. Ҡәләмде ал, уны кеҫәңә һал.
2. Баҫ һәм тәҙрәгә ҡара.
3. Ҡәләмде ал, ағас һүрәтте эшлә.

Эштәр уртаса темпта бер-бер артлы бирелә.

Баһа: 1 балл – уртаса темпта дөрөҫ эшләнгән эш;

0,5 балл – әкрен темпта дөрөҫ эшләнмәгән эш;

0 балл – эштән баш тарта.

Иң юғары балл – 5.

## III серия. «Хәтер ҡеүәһен тикшереү»

Был серияла хәтерләүгә бәйле процестар тикшерелә. Хәтер күләме, ныҡлығы, дөрөҫлөгө һәм шулай уҡ баланың яңылышыусанлығы, хәтер динамикаһы, күҙ алдына килтерә алыу һәләте тикшерелә.

**1-се эш. «Һүрәттә төшөрөлгән предметтарҙы хәтерҙә ҡалдырыу»**

**Бирелә:** Һүрәттә төрлө предметтар төшөрөлгән күрһәтмә. Иғтибар менән ҡара һәм иҫеңдә ҡалдыр. Күҙҙәреңде йом, һүрәттә ниндәй предметтар барлығын әйт.

**2-се эш. «Символдарҙы хәтерҙә ҡалдырыу»**

**Бирелә:** Һандар һәм хәрефтәр төшөрөлгән һүрәттәр. (1, 2, 3, 4, 5, 6, А, О, Н)

**Күрһәтмә:** Иҫеңдә ҡалдыр һәм күҙҙәреңде йом. Мин әйләндергән һүрәттә нимә төшөрөлгәнен әйт.

**3-сө эш. «Һүҙ төркөмөн тикшереү»**

**Бирелә:** 1-се төркөм: шаҡмаҡ, ҡул, өҫтәл.

2-се төркөм: көн, һуған, машина.

Иң тәүҙә беренсе төркөм һүҙҙәрен, һуңынан икенсе төркөм һүҙҙәрен иҫтә ҡалдырыу һәм хәтерҙән әйтеү ҡарала.

**Күрһәтмә:** Иҫеңдә ҡалдыр һәм ошо һүҙҙәрҙе ҡабатла. Тағы берҙе ҡабатла (1-се төркөмдәге һүҙҙәр). Хәтереңдә ҡалдыр һәм был һүҙҙәрҙе яттан ҡабатла. Шулай уҡ 2-се төркөмдәге һүҙҙәрҙе ҡабатла. Ә хәҙер ҡайһы һүҙҙәр беренсе төркөмгә, ә ҡайһылары икенсе төркөмгә ҡарауын әйт.

**4-се эш. «10 һүҙҙе хәтерҙә ҡалдырыу»**

**Бирелә:** таш, ҡаҙ, фил, тун, итек, өрөк, китап, ҡорт, өй, күбәләк. 6-7 йәшлек балалар өсөн 8 һүҙ, 7-8 йәшлек балалар өсөн 10 һүҙ. Һүҙҙәр өс тапҡыр ҡабатлана.

**Күрһәтмә:** Иғтибар менән һәр һүҙҙе тыңла. Хәтереңдә ҡалған һүҙҙәрҙе ҡабатла.

**5-се эш. «Айырым һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу»**

**Бирелә:** 6-7 йәшлек балалар өсөн 5 предмет төшөрөлгән һүрәт. 7-8 йәшлек балалар өсөн 5 һүҙ әйтелә, шулай уҡ таблицалар һалына, төрлө төҫтәге түңәрәктәр бирелә. Һәр һүрәткә һәм һүҙгә – таблица, үҙенә генә хас төҫлө түңәрәк бирелә.

**Күрһәтмә:** Был һүрәттәрҙе (һүҙҙәрҙе) хәтереңдә ҡалдыр, уларҙың өҫтәрендә ниндәй түңәрәктәр ятыуын ҡара. Һүрәттәрҙе (таблицаларҙы) алалар, ә балаға түңәрәкте күрһәтәләр. Был түңәрәктә ниндәй һүрәт булыуын табырға кәрәк.

Баһа: 1 балл – үҙ аллы дөрөҫ эшләнгән эш;

0,5 балл – эш яй темпта, 2-3 хата менән эшләнгән;

0 балл – эш эшләнмәгән.

Иң юғары баһа – 5 балл.

## IV серия. «Акустик гнозистың формалашыуын тикшереү»

Бирелгән сериялағы эштәр ишетеү дәрәжәһен, һиҙемләүҙе, музыкаль һәм ритм тойомлауын тикшереүгә йүнәлтелгән.

**1-се эш**.

**Бирелә:** ҡағыҙ, сынаяҡ, сынаяҡ аҫты, ҡалаҡ, ҡайсылар, шаршау. Шаршау артында ҡағыҙ йомарлау, йыртыу, ҡырҡыу, сынаяҡ менән сынаяҡ аҫтына һығыу һ.б.

**Күрһәтмә:** Иғтибар менән тыңлап тор ҙа, минең нимә эшләгәнлегемде әйт.

**2-се эш.**

**Бирелә:** Магнитофонға төрлө тауыштар яҙылған (ямғыр яуыу, поезд тауышы, ҡоштар һайрауы, эт өрөүе, бесәй мыяулауы, һыйыр мөңрәүе һ.б.)

**Күрһәтмә:** Шуларҙың ниндәй тауыш булыуын билдәләү.

**3-сө эш.**

**Бирелә:** Таныш йырҙарҙың көйө (мелодия) 6 фразанан тора.

**Күрһәтмә:** Тыңла һәм ниндәй йырҙың көйө икәнлеген әйт.

**4-се эш**.

Ритмдар (А. Р. Лурия буйынса)

Балаға бер нисә ритмик һуғыу тәкдим ителә һәм нисә тапҡыр һуғыу булыуын һанарға һәм шунса тапҡыр ҡабатларға.

**Күрһәтмә:** Тыңлап тор һәм мин һуҡҡан кеүек һуҡ.

//

///

// ///

/// //

// // //

// /// //

**5-се эш.**

**Күрһәтмә**: Шул уҡ күнегеү, тик әҙерәк ҡатмарлаштырылған.

2 тапҡыр һуҡ, икенсе тапҡыр – нығыраҡ,

3 тапҡыр һуҡ, беренсе тапҡыр – нығыраҡ,

3 тапҡыр һуҡ, икенсе тапҡыр – нығыраҡ,

3 тапҡыр һуҡ, өсөнсө тапҡыр – нығыраҡ,

2 тапҡыр һуҡ икешәр тапҡыр,

башта 2 тапҡыр, һуңынан 3 тапҡыр.

Баһа: 1 балл – 6 пробаның да дөрөҫ башҡарылыуы;

0,5 балл – әкрен генә эшләнә;

0,25 балл – ә пробаны дөрөҫ башҡарыу;

0 балл – дөрөҫ эшләмәү.

Иң юғары балл – 5.

**V серия. «Күреү гнозисының формалашыуын тикшереү»**

Ҡараған эштәр предмет һәм һүҙ бәйләнешен, предметтарҙы күреү һәләтен һәм айыра белеүен, предметтарҙың билдәләрен айыра белеүҙе күҙ уңында тота.

**1-се эш. Был нимә?**

**Бирелә:** ҡоштарҙы һәм хайуандарҙы сағылдырыусы фигуралар – 6 пар (әтәс – өйрәк, ат – эт, эт – кәзә, кәзә – сусҡа, сусҡа – ат).

**Күрһәтмә:** Иғтибар менән ҡара һәм әйт, бында ниндәй хайуандар һәм ҡоштар төшөрөлгән.

**2-се эш. «Предметты эшләп бөтөр»**

**Бирелә:** 6 карточка, эшләнеп бөтөрөлмәгән һүрәттәр менән эш.

а) ручкаһыҙ сәйнүк

б) артһыҙ ултырғыс

в) аяҡһыҙ өҫтәл

г) телһеҙ сәғәт

д) тәҙрәһеҙ, ишекһеҙ өй

е) тәгәрмәсһеҙ машина.

**Күрһәтмә:** Был нимә? Бында нимә етмәй, предметты тулыһынса эшләп бөтөр.

**3-сө эш. «Символдарҙы таныу»**

**Бирелә:** Бер иш символ төшөрөлгән 6 һүрәт (хәрефтәр, һандар) геометрик фигуралар һәм өсәр символ төшөрөлгән 6 һүрәт. Балаға бер символ төшөрөлгән һүрәтте күрһәтәләр һәм шул уҡ символды өсәр символ төшөрөлгән һүрәттә табырға.

*

*

*

*

*

*

**4-се эш. «Фигураларҙың күсермәһен эшләү»**

**Бирелә:** Төрлө фигуралар төшөрөлгән 6 карточка.

**Күрһәтмә:** Нимә күрәһең, шуны күсереп төшөр. Иғтибарлы бул. Дөрөҫ төшөрөргә тырыш.

*

*

*

*

*

**5-се эш. «Предметтарҙың һүрәтен төшөрөү»**

**Бирелә:** ҡағыҙ, төҫлө ҡәләмдәр.

**Күрһәтмә:** «Һүрәт төшөр, матур, дөрөҫ итеп төшөрөргә тырыш».

* алма

* ҡарбуз

* бәшмәк

* ҡауын

* виноград

* груша

Баһа: 1 балл – нәҡ шулай, дөрөҫ эшләнгән эш;

0,5 балл – 4 эште дөрөҫ үтәгәндә;

0,25 балл – илке-һалҡы эшләнгән эш;

0 балл – бөтөнләй эшләнмәгән эш.

Иң ҙур балл – 5.

## VI серия. «Ҡулдарҙың (бармаҡтарҙың) эшләү һәләтен тикшереү»

Был эштәр ҡулдарҙың дөрөҫ торошона, ҡул мускулдарының үҫешкәнлеген тикшереүгә йүнәлтелгән. Төп эште башҡарыусы бармаҡ һәм ҡайһыларының уға эйәреп эш башҡарыуын, бер элементтан икенсе элементҡа тиҙ генә күсеүен асыҡлауға йүнәлтелгән.

**Күрһәтмә:** «Минең кеүек эшлә» уйыны бик файҙалы.

* «Ҡуян ҡолағы»

* «Ҡаҙ»

* «Күҙлек»

* «Ултырғыс»

* «Кәмә»

* «Шарик»

* «Йоҙаҡ»

* «Ҡошсоҡ»

* «Бер-бер артлы ҡулды йомарлап тотаһың, 2 һул ҡул асылған»

* «Йоҙроҡ – сит – ус – шул һүҙҙәрҙе әйтеп, эштәрҙе башҡарабыҙ»

Баһа: 1 балл – дөрөҫ башҡарған балаларға ҡуйыла;

0,5 балл – яңылышлыҡтар булһа;

0,ә5 балл – ике ҡул менән дөрөҫ эшләмәгән ваҡытта;

0 балл – әгәр бала был хәрәкәттәрҙе эшләй алмаһа.

Иң ҙур балл – 10.

**VII серия**. **«Артикуляцион моториканы тикшереү»**

**1. Кинетик праксистың үҫешкәнлеген тикшереү.**

**Күрһәтмә: «**Мин нисек эшләйем? Иғтибар менән ҡарап тор һәм үҙең дә шулай эшлә».

* «көлөү» – ирендәр йырылған;

* «ирендәр осло» – ирендәрҙе түңәрәкләтеп алға һуҙабыҙ;

* «көрәк киүек тел» – телде киң итеп алға сығарабыҙ;

* телде ослайтып, ауыҙҙын сығарабыҙ;

* телде сынаяҡ киүек итеп тотабыҙ;

* тел менән сапылдатабыҙ;

* тәмле ҡайнатма (ҡайнатма) ашайбыҙ;

* «сәңгелдәк» – телде аҫтан өҫкә йөрөтәбеҙ;

* «сәғәт теле» – ауыҙ асыҡ, тел алға сығарылған, ауыҙҙың бер яғынан икенсе яғына күсә.

* «йылмайыу» – телде ослайтып күрһәтеү.

Был күнегеүҙәр бөтәһе лә алмашлап бирелә.

Артикуляцион күнегеүҙәрҙе башҡарған ваҡытта бала бер нисә секунд өндө «ебәрмәй» тотоп торорға тейеш. Һуңғы күнегеүҙәрҙе 4-5 тапҡыр эшләтергә була. Күнегеүҙәрҙең тулыһынса дөрөҫ, бирелгән ваҡытта үтәлеүенә ҙур иғтибар бирергә кәрәк.

Баһа: 1 балл – хәрәкәттәр тулыһынса дөрөҫ үтәлгән осраҡта;

0,5 балл – хаталар менән үтәгәндә;

0 балл – хәрәкәттәр бөтөнләй үтәлмәһә.

**2. Кинестетик праксистың үҫешкәнлеген тикшереү.**

**Күрһәтмә:** «Өндәрҙе әйт…һәм тел (ирен) торошон билдәлә».

* [и] өнөн әйт – был осраҡтаирендәр «көләме» әллә «ослаямы»?

* [у] өнөн әйт;

* [уи] өндәрен ҡушып әйт һәм ирендәр торошон билдәлә;

* [ми], [му] ижектәрен әйт;

* [а] өнөн әйт, тел осо өҫкә күтәреләме әллә аҫҡа төшәме?

* [т] өнөн әйт;

* [ат] ижектәрен әйт, тел осоноң үҙгәрешен билдәлә;

* [д] өнөн әйт, тел осо киңме әллә тармы?

* [а] өнөн әйт;

* [и], [у], [а], [т(д)], [л] өндәрен әйт.

Был өндәр әйтелешендә һөйләшеү ағзаларын тикшереү өсөн өндәрҙе талғын ғына өс тапҡыр ҡабатларға кәрәк. Кинестетик гнозистың тайпылыуҙары телдәре үҫешмәгән балаларҙа йышыраҡ осрай.

Баһа: 1 балл хәрәкәттәрҙе дөрөҫ үтәгәндә һәм һөйләшеү ағзаларының торошон билдәләй алған осраҡта;

0,5 балл – бирелгән эште хата менән һәм яй үтәгәндә;

0,25 балл – дөрөҫ үтәй алмағанда.

Тикшеренеүҙәр ваҡытында йыйылған балдар бөтәһе бергә ҡушыла. Иң юғары балл – 20.

Кинетик һәм кинестетик праксистарҙы тикшереү тел органдарының ниндәй кимәлдә боҙолоуына һығымта яһарға мөмкинселек бирә, шул уҡ ваҡытта был артикуляцион аппараттың периферик иннервацияһы боҙолоуымы әллә тел үҫешенең тағы ла ҡатмарлыраҡ боҙолоуҙарға дусар булыуымы икәнен асыҡларға ярҙам итә.

**VIII серия. «Өндәр әйтелешен тикшереү»**

**Күрһәтмә:** «Был нимә һүрәте?» Әгәр бала һүрәтте атарға ҡыйынһынһа, шул уҡ өндәр ҡулланылған икенсе һүҙгә һүрәт күрһәтелә.

**I төркөм:** * сана – бысаҡ – әтәс

* себен – үлсәү – игенсе

* зат – ваза – газ (водолаз)

* зәңгәр – зәйтүн – кәзә

* ҡыҫала – балаҫ – таҫма

* кеҫә – киҫәк – өҫтәл

* ҙур – быҙау – ҡаҙ

* йөҙөк – иҙән – беләҙек

* цифр – цикорий – цирк

**II төркөм:** ***** шаҡмаҡ – эшләнә – таш

* жилет – аждаһа – гараж

* чабан – почта – чемпион

* щи – щетка – плащ

**III төркөм:** * ракета – һарыҡ – ҡыяр

* рәшәткә – көрәк – бүре

* лампа – балыҡ – маймыл

* лимон – бәйләм – гөл

* ҡуңыҙ – саңғы – еҢ

* карауат – тауыҡ – бау

* еп – елка – юлдаш – таяҡ

**IV төркөм:** * ҡабаҡ – ҡалҡан – баҡа

* ҡәләм – ҡәмәр

* ғаләм – ағас – яға

* ғинуар – ғәзәл – сәғәт

* һабын – бурһыҡ – һарымһаҡ

* һөт – терһәк – төпһә

**V төркөм:** * атай – ҡом – ус

* әсәй – өкө – үлән

* ҡыҙ – ит – эт

Беҙ дөрөҫ әйтеүе ауыр булған өндәрҙе 5 төркөмгә бүләбеҙ. Һәр бер төркөмдә ауыр һуҙынҡы һәм тартынҡылар бирелә.

**1-се төркөм** – һыҙғырып әйтелгән өндәр: [с], [с'], [з], [з'], [ҙ], [ҫ], [ҫ'], [ц];

**2-се төркөм –** шышылдап әйтелгән өндәр: [ш], [ж], [ч], [щ];

**3-сө төркөм** – сонор өндәр: [р], [р'], [л], [л'], [ң], [й], Y (W);

**4-се төркөм** – артҡы һәм тамаҡ төбө менән әйтелгән өндәр: [ҡ], [ҡ'], [ғ]', [ғ'], [h], [h'];

**5-се төркөм** – бөтә һуҙынҡы өндәр: [а], [о], [у], [ы], [ә], [э(е)], [и], [ө], [ү].

Башҡорт телендә баҫым төшкән һуҙынҡы өндәр үҙҙәренең оҙон (оҙаҡ) әйтелеше менән айырылып тора.

Һәр бер төркөмдәге өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә үҙенә айырым билдә ҡуйыла.

Баһа: 3 балл – төрлө телмәр ситуацияларында өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше;

1,5 балл – ҡайһы бер өндәрҙә хаталар осраһа;

1 балл – төрлө позицияла төркөмдөң берәр өнө дөрөҫ булмаһа;

0 балл – хаталар бик күп булғанда.

Һәр бер төркөмгә ҡуйылған балдар һанының иң юғарыһы 15 булырға тейеш.

**IX серия**. «**Баланың ишетеү дәрәжәһен билдәләү**»

**Күрһәтмә**: «Мин әйткән өндәрҙе тыңла һәм дөрөҫ итеп ҡабатларға тырыш».

Тыңлау өсөн өндәр

* па – ба – ба – па –

* жа – за – за – жа –

* ша – са – са – ша –
* ас – аҫ – аҫ – ас –
* ра – ла – ла – ра –
* ҡа – ғa – ғa – ҡа –
* ма – па – ма – па – ма – па –
* ан – аң – ан – аң – ан – ан –
* да – та – да – та – да – та –
* ғa – ҡа – ғa – ҡа – ғa – ҡа –
* га – ка – га – ка – га – ка –
* ва – фа – ва – фа – ва – фа –
* аҙ – аҫ – аҙ – аҫ – аҙ – аҫ
* за – са – за – са – за – са –
* жа – ша – жа – ша – жа – ша –
* са – ша – са – ша – са – ша –
* ца – са – ца – са – ца – са –
* ча – тя – ча – тя – ча – тя –
* ра – ла – ра – ла – ра – ла –

Иң беренсе (па – ба), һуңынан (ба – па) тикшерелә.

Билдә: 1 балл – дөрөҫ темпта үтәлгән эш;

0,5 балл – беренсе эш дөрөҫ булып, икенсеһе хата булһа;

0,25 балл – ике эш тә хаталы эшләнһә;

0 балл – бала бөтөнләй эшләй алмаһа.

Иң юғары баһа 20 балл булырға тейеш.

**X серия. «Өн-ижектәрҙең структур төҙөлөшөн тикшереү»**

Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү өсөн 6-7 йәшлек балаларға ошондай эштәр бирелә.

1. «Һүҙҙе ҡабатла»

* ел

* әйт

* көрт

* шкаф

* ауыҙ

* йоҡо

* төньяҡ

* башҡорт

* һайыҫҡан

* мотоцикл

2. «Һүрәттә нимә төшөрөлгән?»

* умырзая

* йомортҡа

* һепертке

* уҡытыусы

* мәктәп

Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү өсөн 7-8 йәшлек балаларға ошондай эштәр бирелә.

а) «Һүрәттә нимә төшөрөлгән?»

башҡорт

умырзая

йомортҡа

телеграмма

мөгөҙ морон

гөбөргәйел

уҡытыусы

ҡулъяулыҡ

компьютер

ҡарышлауыҡ

а) «Һөйләмде ҡабатла»

«Милиционер юл күрһәтә»

«Хоккейсы ҡапҡа янында баҫып тора»

«Әсә балаһын ашата»

«Мәктәптәрҙә компьютерлаштырыу бара!

«Башҡорт халыҡ әкиәттәрен сәхнәләштереү»

Башта бала үҙ аллы күрһәтә, һуңынан уҡытыусы артынан ҡабатлай.

Баһа: 1 балл – дөрөҫ темпта үтәлгән эш;

0,5 балл – йәйлап, ижекләп үтәлгән эш;

0,25 балл – өндәрҙең төҙөлөшөн һәм әйтелешен үҙгәртеп әйткән осраҡта;

0 балл – бөтөнләй үтәй алмаһа.

Иң юғары балл – 15.

**XI серия. Һүҙ байлығын тикшереү.**

1. Һин ниндәй йәшелсәләрҙе беләһең?

(һуған, помидор, ҡыяр, картуф, борсаҡ, кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр, шалҡан)

2. Һин ниндәй емештәрҙе беләһең?

(алма, әфлисун, лимон, мандарин, груша, слива, өрөк, персик, гранат, сейә, ҡауын)

3. Ниндәй йорт хайуандарын беләһең?

(һыйыр, үгеҙ, ат, ишәк, һарыҡ, кәзә, эт, бесәй, йорт ҡуяны, сусҡа)

4. Ошо хайуандарҙың балалары нисек атала?

(быҙау, ҡолон, һарыҡ бәрәсе, кәзә бәрәсе, көсөк, бесәй балаһы, сусҡа балаһы)

5. Ниндәй ҡыр хайуандарын беләһең?

(тейен, бүре, айыу, төлкө, ҡуян, мышы, болан, терпе)

6. Был нимә? Бер һүҙ менән әйт. (транспорт)

*трамвай

*автобус

*троллейбус

*автомобиль

*поезд

*самолет

7. Йыл миҙгелдәре тураһында һорашып, белемдәрен тикшерегеҙ (һүрәт, йә тасуирлау буйынса…)

8. Һөнәрҙәр.

*Кем тегә? тегенсе

*Кем поезд йөрөтә? машинист

*Кем өй төҙөй? төҙөүсе

*Кем стеналар буяй? буяусы

*Кем һата? һатыусы

*Кем дауалай? табип

9. Мәғәнә яғынан оҡшаш һүҙәрҙе (синонимдар) табырға.

*һалҡын – һыуыҡ

*хәлһеҙ – ауырыу

*матур – сибәр – һылыу

*бейек – юғары

*еүеш – һыулы

*ҡарт – оло

10. Мәғәнәһе яғынан ҡапма-ҡаршы һүҙәр (антонимдар) яҙырға:

*ҡарт – йәш

*ҙур – бәләкәй

*ауыр – еңел

*килеү – китеү

*инеү – сығыу

*әсе – тәмле (татлы)

11. Хәрәкәтте белдергән һүҙәр әйт. Малай ни эшләй? (Һүрәт буйынса).

*Йүгерә

*Йүгереп килде

*Йүгереп инде

*Йүгереп сыҡты

*Йүгереп китте

*Йүгереп үтте

12. Хәҙерге һәм киләсәк заман ҡылымдары (һүрәттәр буйынса).

Ни эшләй? Ни эшләне?

| | |
|---|---|
| *уйнай | уйнаны |
| *эшләй | эшләне |
| *ашай | ашаны |
| *йырлай | йырланы |
| *һикерә | һикерҙе |
| *яҙа | яҙҙы |

13. Малай ни эшләй?

Һорауҙарға яуап бир: Малай ни эшләне?

Малай ни эшләйәсәк?

| Хәҙерге заман | Үткән заман | Киләсәк заман |
|---|---|---|
| * инә | инде | инер |
| * ҡайта | ҡайтты | ҡайтыр |
| * килә | килде | килер |
| * һикерә | һикерҙе | һикерер |
| * ашай | ашаны | ашар |
| * сыға | сыҡты | сығыр |

14. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр, йәғни сифаттар.

Ниндәй?

Туп (ҙур, матур, ҡыҙыл, түңәрәк, таҙа).

Әфлисун (түңәрәк, әсе, ҡыҙғылт, һары, тәмле).

15. Үҙгәрмәүсе исемдәр (һүрәттәр).

* пальто
* кино
* радио
* пианино
* какао
* панно

Әгәр балалар һорауҙарға яуап бирергә ҡыйынһынһа, уларға баҫымлы һорауҙар биреп ярҙам итергә кәрәк. (Мәҫәлән: «Йәшелсә тип беҙ нимәне әйтәбеҙ – алманымы әллә картуфтымы?) Һәр бер күнегеү 6 эштән тора.

Күнегеүҙәргә шулай уҡ уртаҡ критерийҙар буйынса баһа ҡуйыла:

1 балл – һүҙгә дөрөҫ яуап булғанда;

0,5 балл – 4 һүҙгә дөрөҫ яуап булғанда;

0,25 балл ә һүҙгә дөрөҫ яуап булғанда;

0 балл – яуаптар дөрөҫ булмағанда.

Иң юғарыһы – 15 балл.

**XII серия. «Телмәрҙе анализлаусы күнегеүҙәр».**

1. Һөйләмдә нисә һүҙ?

* Уҡыусы мәктәпкә бара.

* Зилә бик аҡыллы бала.

2. Һүҙҙә нисә ижек?

* бала

* ҡартатай

3. Өндөң һүҙҙәге урыны?

* беренсе өн: ғүмер

* өсөнсө өн: башаҡ

* һуңғы өн: ултырғыс

Һүҙҙә нисә өн?

* өй

* әсә

* урман

Был күнегеүҙәрҙе үтәгән осраҡта, балаға өс тапҡыр ярҙам итергә мөмкинселек бирелә.

Баһа: 1 балл – дөрөҫ яуап;

